# ТИРМӘНСЕ ҠЫҘЫ

Ул ғүмере буйына ошо тирмәндә «заципка» булып торған. Бисәһе Йәмиләнең дә ҡасан үлгәнен хәҙер хәтерләй алмай. Тик Йәмилә еңгә үлгәндә, ярты йәшендә генә ҡалған ҡыҙҙары Сәғиҙәнең хәҙер инде буйға етеп, ҡыҙарып бешкән алма кеүек матур, тау кәзәһе кеүек етеҙ, уңған ҡыҙ булыуы тирмәнсенең яңғыҙ ғына тора башлауына күп ваҡыттар үтеүен күрһәтә...

Уның тормошо бер ваҡытта ла алышынманы буғай: йәй артынан ҡыш килә. Ҡыш көнө тирмән алдындағы быуаны боҙҙар ҡаплап китә, унан боҙ өҫтөнә ҡар яуып ҡуя. Ҡыш көнө ҡыш елдәре киләләр ҙә боҙ өҫтөндәге ҡарҙарҙы һепереп әллә ҡайҙарға алып китәләр, ләкин ҡарҙар һаман яуалар...

Тирмәндән бер нисә генә аҙымда торған бәләкәй өйҙә ҡыш көндәре ҡар тауҙары баҫа, ул саҡтарҙа тирмәнгә килеүсе һирәк була. Шуға күрә заципкасы ҡарт, ҡыштың буранлы һалҡын төндәрендә, үҙе менән бер йәштәге трубкаһын ҡапҡан килеш, ишек төбөндәге һикегә ятып, тышта өй артынан башланып киткән урмандарҙың шыҡһыҙ ҡыш елдәренә ҡаршы ыңғырашыуын, ҡыштың әсе елдәренең йыш-йыш килеп тәҙрә ҡағыуҙарын тыңлап ята. Ә Сәғиҙә кескәй лампа яҡтыһында уҡый ҙа уҡый. Тирмәнсе, ҡыҙының китап өҫтөнә эйелгән башына, яҡ-яҡтан матур күренеп торған йөҙөнә, ике яурынынан туҙылып төшкән оҙон, ҡуйы сәстәренә ҡарап, оҙаҡ ваҡыт уның тураһында уйлай:

— Тап әсәһе мәрхүмгә оҡшаған (йәне йәннәттә булһын), уның да бына шулай ҡаштары ҡыйғас, керпектәре оҙон, ҡиәфәте лә ошондай уҡ ине буғай...

Шул урында заципкасы, иҫәпһеҙ тапҡырҙар ҡабатланған, шымарып бөткән уйҙарын тағы ла ҡабатлай. Йәш сағында, теге Пашка тирмәненә беренсе мәртәбә заципкасы булып кергәс, осратҡайны ул Сәғиҙәнең әсәһен — Йәмиләне... Улар атаһы менән күрше ауылдан тирмән тарттырырға килгәйнеләр. Шул ваҡытта улар Йәмилә менән күҙ ҡыҫыштылар, Йәмилә лә матур йылмайып ҡуйҙы. Унан һуң матур йәйге төндәрҙә, көндөҙ эшләп

эттәй арыуына ҡарамаҫтан, ул өс саҡрымға Йәмиләне күрергә йөрөүсән булды.

Тирмәнсенең ғүмерендә иң матур ваҡыттар шул алыҫ үткәндәргә күмелеп ҡалған Йәмилә менән үткәргән йәйге төндәр генә булды.

Тирмәнсе ҡыҙын күп борсорға теләмәй. Берҙән-бер генә яҡын кешеһе бит уның, үҙе ниндәй матур, үҙе уңған, тик яҡшы ғына кейәүгә тап килтерһен инде хоҙай, үҙем ҡартайҙым, әллә ҡарт көнөмдә ярҙамсы булыр ине, тип уйлай ул, тағы бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡарт уйҙарынан оҙон сынйырҙар теҙергә тотона.

Сәғиҙә, һуңғы йәй һәм көҙҙө, ауылға бик йыш йөрөнө. Ҡайһы кешеләр Сәғиҙәнең ауылда читальныйға барғанын, унда комсомолдарға ҡатнашҡанын һәм бер нисә тапҡыр уны комсомол Имай менән йөрөүҙәрен күргәндәрен һөйләнеләр. Ҡарттың күңеленә шик төштө. Шулай ҙа ул, Сәғиҙәлә ҙур үҙгәрештәр күрмәгәнгә, хәҙергә тиклем үҙенең уйҙарын әйтмәй йөрөнө. Ҡыҙының уҡырға өйрәнеүен дә, нишләптер, белмәй ҡалды. Тирмәнсе, төрөпкәһендәге көлөн ишек яңағына ҡағып ҡуйғандың һуңында, Сәғиҙәгә ҡарап, яйлап ҡына:

— Ҡыҙым, ҡасан һуң әле һин уҡырға өйрәндең, бына үҙем, ир кеше була тороп, пудпис ҡуйырға ла белмәйем бит,— тине.

Сәғиҙә, китаптан башын алмайынса ғына, етди яуап бирҙе:

— Ниңә, әллә халыҡ «ҡыҙың аҙып-туҙып йөрөй» тигәс тә, ысынлап та шулай булған тип beләһеңме? Беҙ, атай, унда уҡытыусынан уҡырға, яҙырға өйрәнәбеҙ, ә һин уларға ышанма, яраймы, атай?

— Ярар, ярар, балам, тик һаҡланыбыраҡ йөрө. Алла тәүфиҡ бирһен инде...

Тирмәнсе ҡарт уйға ҡала.

Тышта ҡышҡы елдәр менән урман шаулауы тирмәнсенең уй сынйырҙарын ҡырҡа түңкәрә.

Һалҡын ҡыштарҙы йәйҙәр килеп ҡыуып ебәрәләр. Шунда инде ҡыштар алыҫ урмандарҙан, киң ҡырҙарҙан йырғанаҡтар булып йылғаларға

йүгерәләр-йүгерәләр ҙә шунда ҙур ташҡындар булып шаулашалар, шулай йәй килә...

Бына шундай матур йәй башында тирмән арығынан яҙғы һыуҙар боҙҙар менән аралаш шаулап аҡҡанда, Сәғиҙәгә яңғыҙ ғына өйҙә ултырыуы күңелһеҙ була. Ул, иртән иртә үк тороп, атаһы, тирмән ташы кеүек, гөбөрҙәп йоҡлап ятҡанда, яҙ ҡояшының ҡыҙыу нурҙары аҫтында кипшенгән яр башына ултырып, яҙғы ташҡындарҙың көслө шаулауын тыңлай... Шунда уның йәп-йәш йөрәгендә ниндәйҙер бер бушлыҡ һиҙелә, тормошонда нәмәлер етмәгән кеүек тойола, уның һикереп уйнағыһы, боҙҙар аралаш урғылған тулҡындарҙы барып ҡосаҡлағыһы килә. Уға нәмәлер етмәй.

Тирмәндең хәҙерге хужаһы — бер генә саҡрымда торған ауылдың бер кулагы. Ул элек мулла булған. Унан һуңғы йылдарҙы, муллалыҡтың почеты бөткәс, халыҡ ғөшөр, фытыр бирмәй башлағас, төрлө кәсепкә тотонған. Уның был ғына түгел, тағы «Әй» һыуында ла тирмәне бар, тиҙәр. Барҙыр шул, бай булғас, булыр инде. Ләкин тирмәнсе ҡарттың унда эше юҡ. Ул, ғүмер буйына заципкасы булып, тоғролоҡ менән хеҙмәт итергә лә, өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булырлыҡ хеҙмәт хаҡы алырға ла — башҡа бер нәмәгә лә тығылмаҫҡа өйрәнгән. Тирмәндең хужаһы кем булһа ла — уның өсөн барыбер. Тирмән тәгәрмәстәре, алты аяҡтар, таштар менән генә ул эш йөрөтә.

Әле бына тирмәнгә килеүселәрҙән, был тирмәнде хәҙерге хужаһы ҡулынан заемпомощҡа алалар имеш, тигән хәбәр ҙә уны бөтөнләй ҡыҙыҡтырманы. Уға ҡарап берәүҙең:

— Камали ағай, хәҙер тирмән общество ҡулына күсә. Инде тобалды (тарттырыу хаҡы) кәметәсәктәр,— тиеүенә, ул:

— Улай икән,— тип кенә ҡуйҙы.

Ул көндө хужа кискә табан ғына килде. Килгәс тә, оҙаҡ ваҡыт тирмән быуаһына ҡарап торҙо, унан бағаналарҙы ҡараштырҙы, һәр ваҡыт унан ҡалмай торған заципкасыға ҡарап:

– Былтыр ныҡ быуғанбыҙ ахыры, йырманы бит быйыл, – тип ҡуйҙы һәм, ауыҙ эсенән генә бер аҙ йылмайып, һүҙен бөтөрҙө:

— Тирмән өс мең һумға страховать ителгән... Зарар юҡ...

Йәй ҡояшы тирмән өйө ҡырында башланып киткән урмандар аша һуңғы ҡыҙғылт нурҙарын тирмән быуаһына ташлап көнбайышҡа табан китеп бара. Киске тынлыҡта һыу өҫтө көҙгө кеүек ялтырай. Ҡайһы саҡта ҡамыш араларындағы ҡыр өйрәктәре ҡапыл пырхылдап күтәреләләр ҙә быуа уртаһына барып төшәләр. Улар төшкән урында һыу өҫтөндә ҡатлы-ҡатлы түңәрәктәр тирә-яҡҡа тарала — быуа тағы тынып ҡала, ә өйрәктәр бер нисә нөктә генә булып күренәләр. Ҡайһы саҡта әкрен генә йылы ел иҫеп китә, урманда ҡуйы япраҡтар йәшерен генә ниҙер тураһында һөйләшеп алалар, тағы тыналар...

Бына ҡояш та байыны. Оҙайғандан оҙая барған күләгәләр юҡ булдылар. Тирмән быуаһы ла ҡара пәрҙә менән ҡапланды. Тирә-яҡ тын. Тик ҡай саҡта яҡын күлдә баҡылдаған баҡа тауыштары ғына ҡараңғы тынлыҡты бер аҙ боҙалар ҙа тағы туҡтайҙар.

Шунда кемдер, урман араһынан сығып, тирмән өйөнә яҡынлашты. Ҡапыл ҡоро сыбыҡ шытырҙағаны ишетелеп ҡалды. Тауышҡа, урманда ниндәйҙер ҡоштар пырхылдап киттеләр. Күләгә бер аҙ туҡтап торҙо ла, әкрен генә килеп, тирмән өйөнөң тәҙрәһен ҡаҡты. Күп тә үтмәне, өйҙән Сәғиҙә килеп сыҡты, күләгәгә ташланды.

— Был һинме, Имай?

— Әйҙә, яр башына барып ултырайыҡ әле... Улар, етәкләшеп, тирмәндән алыҫ түгел яр башына барып ултырҙылар.

— Беләһеңме, Сәғиҙә, тирмәндең эше бөттө. Тирмән хәҙер заемпомощтыҡы. Бик оҙаҡ этләшергә тура килде. Кантонда йөҙәтеп бөтөрҙөләр. «Договорҙы төҙөп булмай», фәлән тиҙәр, шулай ҙа үҙебеҙҙекен эшләнек...

— Уныһы яҡшы булған. Теге бирән ҡорһаҡты һимертеп ятҡансы. Үҙенән халыҡ бик зарлана ине. Бот башына 5 ҡаҙаҡ ала бит суҡынғаның...

— Ну, уныһы шулай, Сәғиҙә... Ҡасан?..

— Нәмә ҡасан?!.

— ...загска барабыҙ?

Сәғиҙә менән Имай күп һөйләшеп ултырҙылар. Көнсығыштан ҡыҙарып ай ҙа ҡалҡты. Асыҡ зәңгәр күктәге йондоҙҙар, тирмән быуаһына шәүләләрен ташлап шаярырға тотондолар. Быуаның үрге башынан аҡ томан күтәрелде. Яр башында ултырған күләгәләр аяҡҡа баҫтылар, баштар бергә ҡушылған кеүек булды... Ниҙәндер ҡурҡҡан кеүек ҡапыл быуа өҫтөндәге өйрәктәр шыҡырҙап күккә күтәрелделәр. Сәғиҙә, башын эйеп, өйгә табан йүгерҙе, комсомол Имай, ауылға табан урмандар араһына кереп юғалды...

Өйгә инәм тигәндә генә, Сәғиҙәнең күҙе тирмән яғына төштө. Ниндәйҙер кескәй ут йылтырағаны күренеп китте. Сәғиҙә ишекте асып:

— Атай! — тине. Ләкин бер кем дә яуап бирмәне. Ул тирмәнгә табан йүгерҙе. Тирмән эргәһендә баҫып торған атаһы уны туҡтатып:

— Хужа тирмәнгә ут төртөргә йөрөй буғай...— тине.

Сәғиҙә уны бүлеп:

— Һуң, атай, ниңә ҡарап тораһың? Бар уны быуып ташла, тирмән халыҡтыҡы бит!..

— Белмәйем, ҡыҙым, белмәйем. Хужаға ҡаршы барыуы ла ярап бөтмәй бит... Үҙенеке, теләһә нишләтә...

Шунда Сәғиҙә ут йылтыраған яҡҡа тороп йүгерҙе. Камали ҡарт шул минутта, тирмән янһа, үҙенең ас ҡаласағын, кемдә булһа ла, тирмән булһа, тамағы туҡ буласағын уйланы һәм хужаның былай ҡыланыуын дөрөҫ тапманы. Ҡыҙы артынан барып еткәндә, һыуырғыс тишегенән башланған ут яҡшы ғына йәйелеп бара ине инде.

Сәғиҙә уға ҡарап:

— Сымылдыҡ алып утты ҡапла, атай! — тип бөтә көсө менән ҡысҡырҙы, һәм үҙе, әле генә тирмән эсенә инеп киткән күләгәнең кем икәнен таныр өсөн, тирмәнгә инде. Эстә бишле лампа янып тора ине. Уның күҙе аҫтағы ҡоро ҡуласаға төштө. Ҡоро ҡуласаның валына

йәбешеп тирмән хужаһы ултыра ине. Уның күҙҙәре ҙур асылған, йөҙө ағарған, үҙе әҙерәк йылмая.

Сәғиҙә уға ҡарап:

— Ниңә ут төрттөң, ниңә яндыраһың килде? — тине. Һәм яуап көтмәйенсә үк өҫкә, арыҡҡа, ташланды... Арыҡты асып ебәрә торған таҡтаға тотоноп, бер нисә секунд уйҙа ҡалды:

«Һыу ебәрһәм, нишләр икән... үлер бит әле. Мине төрмәгә алып китерҙәр... Әй, суҡынһын, йыуан ҡорһаҡ!..»— йәшен тиҙлеге менән ул арыҡты асты. Һыу шаулап ҡуласаға барып төштө. Ҡуласалар ҡуҙғалдылар, аяҙ төндөң матур тынлығы тирмән гөрөлдәүе менән тулды...

Сәғиҙә, аҫҡа төшөп, ҡоро ҡуласа яғына ҡараны. Унда кейемдәре үҙәккә уралған, үҙе тәртипһеҙ ит киҫәгенә әйләнгән тирмән хужаһы ҡуласа менән бергә бөтөрөлә ине.

Сәғиҙә төн буйы йоҡлай алмай сыҡты. Күҙен йомдо иһә, уның күҙ алдына ҡуласа үҙәгенә уралған тирмәнсенең өҙгөләнгән кейемдәре, үҙәк тирәләй аҡҡан ҡан, ит киҫәктәре килә. Бына хәҙер килерҙәр ҙә уны ябырға алып китерҙәр, ҡыҙ башың менән кеше үлтергәнһең тип йөҙөнә төкөрөрҙәр төҫлө.

Унан, томанлы ғына булһа ла үҙен аҡларға тырыша.

— Ул бит тирмәнде яндырырға, халыҡты тирмәнһеҙ ҡалдырырға теләгәйне. Уның халыҡҡа бер файҙаһы ла юҡ ине. Совет мине яҡлар әле...

Икенсе яҡтан заципкасы ҡарт та төн буйына өҙгөләнеп сыҡты. Ул торған һайын ҡыҙын әрләй:

— Кеше үлтерҙең бит, ҡәһәр, кеше... Бының өсөн һине лә, мине лә катр ебәрәләр инде...

Ләкин, таң атыу менән, уларҙың ҡайғыһы баҫылды: ауылдан Совет председателе менән бер нисә кеше, комсомол Имай килделәр.

Совет председателе Сәғиҙәгә ҡарап:

— Их, молодец, ҡыҙый, бик уҫал эшләгәнһең. Бөгөн үк ВИК-ҡа барып эште аңлатып ҡайтырға кәрәк, һиңә бер нәмә лә булмаҫ...— тине.

— Кеше үлтереү яҡшы түгел дә һуң... Мин уны ҡурҡытып сығарайым тигәйнем, ул шунда тороп ҡалған икән...

— Йә ярай. Ә һин, Камали ағай, хәҙер тирмәндең заведующийы булырһың, һиңә ярҙамға берәй комсомолды ебәрербеҙ,— тине председатель, заципкасыға ҡарап. Имай йылмайыуыраҡ:

— Помощник булып үҙем киләм әле Хәйретдин ағай,— тине. Хәйретдин, бер Имайға, бер башын эйеп торған Сәғиҙәгә ҡарап, күҙен ҡыҫты ла:

— Крой әйҙә...— тине.

Бер һүҙ ҙә өндәшмәй торған Камали ауыр ғына итеп:

— Һуң беҙҙең хужа кем  була  инде?—тине. Председатель көлөп яуап бирҙе:

— Һин үҙең хужа булаһың, Камали ағай, үҙең, һине общество исеменән һайлап ҡуябыҙ...

— Мин заципкасылыҡты ташламайым инде...

Икенсе көндө заемпомощь председателе, комсомол Имай, Сәғиҙә, өсәүләп, ВИК-ҡа киттеләр. Ҡуҙғалып киткәндә, уларҙы тирмәндең тигеҙ генә көслө гөрөлдәүе оҙатып ҡалды.

Заемпомощь председателе үҙенең пландарын һөйләп китте:

— Был тирмән эргәһендә ауыл хужалығы артеле төҙөргә кәрәк, һыу күп, барыбер күбеһе әрәмгә китә, электр станцияһы ҡороп ебәрергә мөмкин. Янында урман да бар, бына тигән артель булыр...

Улар шулай бик оҙаҡ артель тураһында һөйләшеп алдылар. ВИК-ҡа етер алдынан заемпомощь председателе арттараҡ ҡалды.

Имай,  Сәғиҙәгә ҡарап:

– Шул уңайҙан ЗАГС-ҡа ла инеп сығайыҡ инде, Сәғиҙә, – тине. Сәғиҙә йылмайып, башы менән ымлап, ризалығын белдерҙе. Баштар бергә ҡушылдылар... Шул уҡ ваҡытта юлдың бер яғында ҡыуаҡлыҡта һандуғас үҙенең сутылдауын башлап ебәрҙе...

— Тип,  тип, тип, суп,  суп...

Председатель, Имайҙарға ҡарап, арттан килеп еткәндә:

— Һайт һеҙҙе! — тип йылмайып, бармаҡ янап ҡуйҙы.

Ҡояш төшлөккә етеп барғанда, улар ВИК торған ауылға барып инделәр.